# һӨНӘРҘӘР



Башҡортостан
Республикаһы
Өфө ҡалаһы
ҡала округының
“18 – се башҡорт балалар баҡсаһы” муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы.

# НИНДӘЙ ҺӨНӘР ҺАЙЛАРҒА?










...Бәләкәстән кәрәк һөнәр
Күңеленә ятырҙай.
Һөнәрлеләр тормошто ла
Һәм үҙен дә матурлай.

*(М. Дилмөхәмәтов)*



# ТАБИП

Табип апай укол һала,
Тағы бирә дарыуҙы.
Дуҫтарым урамда
уйнай,
Их, ҡыйын ауырыуы.

*(М. Ғалиева)*



# УҠЫТЫУСЫ

Белем илен күргәнем юҡ,
Бәләкәй мин әлегә.
“Уҡытыусы ишек аса, -
Ти әсәйем, - ул илгә”.

*(М. Ғалиева)*



# АШНАҠСЫ

“Кем эшләмәй – шул
ашамай”,-
Яҡшы белә ашнаҡсы
Шоколадтан торт
бешереп,
Тәмләтеп ҡарамаҡсы,
Телдәреңде йоторлоҡ,
Һөнәрҙәрен оторлоҡ.

*(М. Ғалиева)*



# ТЕГЕНСЕ



Күбәләкле ал күлдәге
Эй, килешә Ләйләгә.
Матур – матур
күлдәктәрҙе
Унған апайҙар тегә.

*(М. Ғалиева)*

# ШАХТЕР

Һуҡыр сысҡан аптыраған,,
Күреп ҡалғас шахтерҙы.
Әлегәсә белгәне юҡ
Үҙе кеүек батырҙы.
Байлыҡ таба ағайҙар –
Ҡараңғынан ҡурҡмайҙар.

*(М.Ғалиева)*



# УРМАНСЫ

Ағайым – етеҙ урмансы
Тәбиғәтте һаҡлаусы,
Терпекәйҙе, тейенкәйҙе,
Ҡуянҡайҙы яҡлаусы.
Мин дә урман ҡарайым,
Ғорурланһын ағайым.

*(М. Ғалиева)*



# Барлыҡ һөнәрҙәр ҙә яҡшы,
# Барлыҡ һөнәрҙәр кәрәк!

